КИЛЕШЕЛГӘН
Башҡорт телен һаҡлау
һәм үҫтереү фонды
директоры
______________Г. ЙОСОПОВА

РАҪЛАЙЫМ
Башҡортостан Республикаһы
мәғариф министры в.б.,
Ойоштороу комитеты рәйесе
______________А. ХАЖИН

# БАШҠОРТ ТЕЛЕНӘН ХАЛЫҠ-АРА ДИКТАНТТЫ ойоштороу һәм үткәреү тураһындағы ПОЛОЖЕНИЕ

## 1. Дөйөм положениелар

1.1. Был положение йыл һайын уҙғарылған “Башҡорт теленән халыҡ-ара диктант” халыҡ-ара белем биреү акцияһын (артабан — Диктант) үткәреү тәртибен һәм шарттарын билдәләй.

1.2. Диктант түбәндәге кимәлдәрҙә ҡатнашыуҙы күҙаллай:

— башҡорт телен яңы өйрәнә башлау кимәле;

— башҡорт телендә иркле һөйләшеү кимәле.

1.3. Диктант — хатаһыҙ яҙыу мәҙәниәтен популярлаштырыу һәм үҫтереү мәсьәләләренә иғтибарҙы йәлеп итеүгә йүнәлтелгән, теләге булғандарҙың барыһы өсөн тәғәйенләнгән, йыл һайын үткәрелгән иркле, түләүһеҙ белем биреү акцияһы.

1.4. Диктанттың темаһы ойоштороусылар тарафынан йыл һайын билдәләнә.

1.5. Диктантты ойоштороусылар: Башҡортостан Республикаһының Мәғариф министрлығы, Башҡортостан Республикаһының юғары белем биреү ойошмалары ректорҙары Советы, Башҡорт дәүләт университеты, М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты, Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү фонды.

1.6. Диктантҡа әҙерләнеүгә һәм уны үткәреүгә дөйөм етәкселекте — Ойоштороу комитеты, оператив етәкселекте Эш комитеты тормошҡа ашыра. Эш комитеты Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү фонды, Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы, Башҡортостан Республикаһының юғары белем биреү ойошмалары ректорҙары Советы, Башҡорт дәүләт университеты, Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты, Башҡортостан Республикаһының Матбуғат һәм киң мәғлүмәт

саралары агентлығы, Башҡортостан Республикаһының Мәҙәниәт министрлығы вәкилдәренән төҙөлә.

1.1. Диктанттың һөҙөмтәләрен эшкәртеү өсөн ғалим-филологтарҙан, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларынан торған Эксперт комиссияһы ойошторола. Эксперт комиссияһы диктант үткәрелгән урындарҙа үҙҙәренең эксперттар селтәрен ойоштора ала.

1.2. Киң мәғлүмәт саралары Диктанттың рәсми мәғлүмәт партнеры була ала.

1.3. Диктант тураһындағы тулы мәғлүмәт Халыҡ-ара диктанттың http//bashkdictant.ru сайтында урынлаштырыла.

1.4. Диктанттың девизы: “Башҡорт телендә һөйләшәм, башҡорт телендә яҙам”.

## 2. Диктанттың маҡсаты, бурыстары, уны үткәреү принциптары

2.1. Диктанттың маҡсаты — башҡорт телен танытыу, белемлелек проблемаһына йәмәғәтселектең иғтибарын йәлеп итеү, белем алыуға, уның кимәлен күтәреүгә ҡыҙыҡһыныуҙы дәртләндереү.

2.2. Диктанттың бурыстары:

— теләге булған һәр кемгә Диктант барышында үҙенең белем кимәлен билдәләү мөмкинлеген биреү;

— башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү мәсьәләһенә йәмәғәтселектең иғтибарын йәлеп итеү;

— телмәр һәм яҙма коммуникацияның модалы һәм заманса алымы булараҡ башҡорт телен популярлаштырыу;

— башҡорт телен өйрәнеүгә ылыҡтырыу.

2.3. Диктантты үткәреү түбәндәге принциптарға нигеҙләнә:

— иреклелек принцибы: Диктантҡа әҙерләнеүҙә, уны үткәреүҙә һәм яҙыуҙа ҡатнашыу ирекле, теләк буйынса;

— башҡорт телен белеү кимәлен билдәләү принцибы: ҡатнашыусы башҡорт телен белеү кимәлен үҙ аллы йәки Диктанттың сайтында урынлаштырылған тест ярҙамында билдәләй ала;

— асыҡлылыҡ принцибы: Диктант яҙыуҙа йәше, белеме, социаль хәле, инаныуҙары һәм гранжданлығы ниндәй булыуға ҡарамаҫтан, теләге булған һәр кеше ҡатнаша ала;

— тиң мөмкинлек принцибы: Диктантта ҡатнашыу түләүһеҙ нигеҙҙә тормошҡа ашырыла, һәр ҡатнашыусыға уны яҙыу мөмкинлеге бирелә, эште

тикшереү һәм http//bashkdictant.ru сайтында һөҙөмтәләр менән танышыу гарантиялана;

— анонимлыҡ принцибы: Диктантта ҡатнашыусылар үҙҙәренең шәхси мәғлүмәттәрен күрһәтмәүе лә ихтимал;

— ваҡыттың берҙәмлек принцибы: диктант Рәсәй Федерацияһының бөтә төбәктәрендә һәм сит илдәрҙә бер үк көндә бер ваҡытта (Өфө ваҡыты буйынса) үткәрелә; Диктантта ҡатнашыусыларға уны яҙыуға бер үк ваҡыт арауығы бирелә.

## 3. Диктантта ҡатнашыусылар

3.1. Һәр кеше, енесенә, расаһына, милләтенә, теленә, сығышына, мөлкәт һәм вазифа хәленә, йәшәгән урынына, дингә мөнәсәбәтенә, инаныуҙарына, йәмәғәт берекмәләренә инеү-инмәүенә, шулай уҡ башҡа хәлдәргә ҡарамаҫтан, Диктантта ҡатнаша ала.

3.2. Ҡайҙа йәшәүгә һәм теркәлеүгә ҡарамаҫтан, Рәсәй Федерацияһында һәм сит илдәрҙә Диктантты үткәреү майҙансығы координаторына мөрәжәғәт итеп, унда ҡатнашырға мөмкин.

3.3. Диктанттың рәсми сайтында теркәлеп, “Интернет” мәғлүмәт-телекоммуникация селтәре аша Диктантта ҡатнашырға мөмкин.

3.4. Диктантта ҡатнашыусы үҙаллы йәки Диктант сайтында урынлаштырылған тест ярҙамында башҡорт телен белеү кимәлен билдәләй ала.

## 4. Диктантты үткәреү срогы һәм ваҡыты

4.1. Диктант Рәсәй Федерацияһының барлыҡ төбәктәрендә һәм сит илдәрҙә берҙәм көндә үткәрелә.

4.2. Диктант 2019 йылдың 18 майында уҙғарыла. Ул Өфө ваҡыты буйынса иртәнге сәғәт 10-да башлана.

## 5. Диктантты үткәреү майҙансыҡтары

5.1. Диктантты үткәреүҙең төп майҙансыҡтары:

- “Башҡорт дәүләт университеты” юғары белем биреүсе федераль дәүләт бюджет мәғариф учреждениеһының төп уҡыу корпусындағы (Өфө ҡалаһы, Зәки Вәлиди урамы, 32) 2-се аудитория (башҡорт telендә иркен һөйләшкәндәр өсөн), 1-се аудитория (башҡорт телен яңы өйрәнә башлағандар өсөн);

- “М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты” юғары белем биреүсе федераль дәүләт бюджет мәғариф учреждениеһының 2-се корпусындағы (Өфө ҡалаһы, Октябрь Революцияһы урамы, 3а) 202-се аудитория (башҡорт телендә иркен һөйләшкәндәр өсөн), 206-сы аудитория (башҡорт телен яңы өйрәнә башлағандар өсөн);
- Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы (Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 43).

Диктанттың рәсми сайтында Башҡорт дәүләт университеты майҙансығынан тура тапшырыу алып барыла.

5.2. Өҫтәмә майҙансыҡтар “Башҡорт дәүләт университеты” юғары белем биреүсе федераль дәүләт бюджет мәғариф учреждениеһы филиалдарында, Башҡортостан Республикаһы һәм Рәсәй Федерацияһы төбәктәрендәге, яҡын һәм алыҫ сит илдәрҙәге дөйөм, урта махсус һәм юғары белем биреү ойошмаларында ойошторола.

5.3. Һәр төрлө юридик берәмек, ойоштороу хоҡуҡ формаһының, милек формаһының ниндәй булыуына, урынлашҡан еренә ҡарамаҫтан, Диктантты үткәреү майҙансығын аса ала. Диктантты үткәреүҙе ойоштороуға дәғүә итеүселәргә ойоштороусының тултырылған онлайн-анкетаһын һәм ғаризаға теркәлгән материалдар тәҡдим итергә кәрәк.

5.4. Диктантты үткәреү майҙансығын ойоштороусы:

— Эш комитеты менән Диктантты үткәреү урынын, эш һәм эксперт төркөмдәре, дикторҙар составы буйынса килешә;

— ғилми, мәғариф, йәмәғәт һәм башҡа ойошмаларҙың ирекле нигеҙҙә Диктантҡа әҙерләнеүҙә һәм уны үткәреүҙә ҡатнашыуын тәьмин итә;

— үҙ аҡсаһы иҫәбенә ойоштороу, мөлкәт, финанс мәсьәләләрен хәл итеүҙе тәьмин итә;

— Диктантта ҡатнашыусылар өсөн урындар менән йыһазландырылған бүлмәләр, биналар бүлеүҙе тәьмин итә;

— Диктантта ҡатнашыусыларҙы яҙыу кәрәк-ярағы менән тәьмин итеү мәсьәләһен ҡарай;

— Эш комитеты менән килешеп, Диктант тексын уҡыуға белгес-филологтарҙы, уҡытыусыларҙы һәм яҙыусылар, йәмәғәт эшмәкәрҙәре, артистар, журналистар, телевидение алып барыусылары, сәйәсмәндәр иҫәбенән билдәле кешеләрҙе йәлеп итә;

— Диктантта ҡатнашыусыларҙың эштәре һөҙөмтәләрен 2019 йылдың 19 майында 15:00 сәғәткә тиклем bashkdiktant@mail.ru почтаһына ебәрә;

— Диктантты үткәргәндә фотоға, видеоға төшөрөүҙе тәьмин итә;

— сараны үткәреү тураһында отчет бирә.

5.5. Эш комитеты майҙансыҡтарҙы ойоштороусыларға мәғлүмәти һәм консультатив-методик ярҙам күрһәтә, кәрәк булғанда — үҙ вәкилен ебәрә.

5.6. Диктантты үткәреү майҙансыҡтары исемлеге Диктанттың рәсми сайтында күрһәтелә.

## 6. Диктантты ойоштороу һәм үткәреү

6.1. Эш комитеты, Диктантты үткәреү майҙансыҡтарын ойоштороусылар сара башланғанға тиклем Диктант текстарының йөкмәткеһенә ҡағылған мәғлүмәттең һаҡланыуын тәьмин итә.

6.2. Башҡорт телендә иркен һөйләшкәндәр кимәле өсөн Диктант тексы — 250 һүҙҙән, башланғыс кимәл өсөн 150 һүҙҙән артмаҫҡа тейеш.

6.3. Төп һәм өҫтәмә майҙансыҡтарҙа Диктантта ҡатнашыусыларҙың эштәре урында тикшерелә. Өҫтәмә майҙансыҡта Диктант яҙғандарҙың эш һөҙөмтәләре майҙансыҡтарҙы ойоштороусылар тарафынан 2019 йылдың 19 майында 15:00 сәғәткә тиклем bashkdiktant@mail.ru почтаһына ебәрелә.

6.4. Диктантты “Интернет” мәғлүмәт-телекоммуникация селтәре аша яҙған кеше эшен Эксперт комиссияһы тарафынан тикшереү өсөн bashkdiktant@mail.ru почтаһына pdf форматында үҙ аллы ебәрә.

6.5. Тикшереүгә тапшырылған эштәр рецензияланмай, ҡатнашыусыларға кире ҡайтарылмай. Эште тикшереү йомғаҡтарын апелляцияға биреү ҡаралмаған.

## 7. Диктанттың рәсми сайты

7.1. Диктантты ойоштороуҙы һәм үткәреүҙе мәғлүмәти йәһәттән тәьмин итеү маҡсатында “Интернет” мәғлүмәт-телекоммуникация селтәрендә Диктанттың рәсми сайты (артабан — Сайт) эшләй. Сайтта насар күргән кешеләр өсөн версия ла бирелә.

7.2. Сайт http://bashkdictant.ru адресы буйынса урынлашҡан.

7.3. Сайт түбәндәге бүлектәрҙе үҙ эсенә ала: бәйләнештәр, ойоштороусылар тураһында мәғлүмәттәр, әҙерлек материалдары, ҡатнашыусыны теркәү, эксперт комитеты составы, Диктант картаһы, башҡорт телен белеү кимәлен билдәләү өсөн тест, Диктантты үткәреүгә бәйле яңылыҡтар һәм ваҡиғалар.

7.4. Сайттан файҙаланыусылар сарала ҡатнашыу маҡсатында теркәлә, шулай уҡ башҡорт телен белеү кимәлен билдәләү йәһәтенән тест үтә ала.

7.5. Сайттан файҙаланыусы Диктантты үткәреү көнө, урыны һәм ваҡыты тураһында белдереү ала.

7.6. Диктант үткәрелгән көндә Сайтта унан тура тапшырыуҙы асыҡтан-асыҡ ҡарау мөмкинлеге бирелә.

## 8. Диктантҡа йомғаҡ яһау

8.1. Диктантты яҙыу һөҙөмтәләре ул үткәрелгәндән һуң 30 көндән дә һуңға ҡалмайынса http://bashkdictant.ru сайтында баҫылып сыға.

8.2. Майҙансыҡта Диктант яҙған кешегә ҡатнашыу тураһында сертификат бирелә.

8.3. “Интернет” мәғлүмәт-телекоммуникация селтәре аша Диктант яҙған кешегә ҡатнашыусы сертификаты ул күрһәткән электрон почта адресына ебәрелә.

8.4. Ойоштороу комитеты Диктантты үткәреү майҙансыҡтарын ойоштороусыларҙы һәм ҡатнашыусыларҙы дәртләндереү тураһында ҡарар ҡабул итә ала.

## 9. Диктантты ойоштороусылар менән бәйләнешкә инеү

9.1. Бөтә ойоштороу мәсьәләләре буйынса түбәндәге телефон һандары буйынса мөрәжәғәт итергә мөмкин:

Йосопова Гөлназ Рауил ҡыҙы — Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү фонды директоры — +7-919-157-09-99

Саньярова Рәмилә Рәмил ҡыҙы — БДУ-ның башҡорт филологияһы һәм журналистика факультеты деканының уҡыу-уҡытыу эше буйынса урынбаҫары — +7 (347) 273-82-72

Сәйфуллина Гөлбикә Вәли ҡыҙы — БДУ-ның башҡорт филологияһы һәм журналистика факультетындағы шәрҡиәт кабинеты мөдире — +7 (347) 273-33-82

Рәхимова Эльвира Фидаил ҡыҙы — М. Аҡмулла исемендәге БДПУ-ның башҡорт филологияһы факультеты деканының уҡыу-уҡытыу эше буйынса урынбаҫары — +7 (347) 246-35-75

Ғәлиева Гөлназ Винер ҡыҙы — Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығының милли мәғариф, төбәк-ара хеҙмәттәшлек һәм дәреслектәр нәшер итеү бүлегенең төп белгес-эксперты — +7 (347) 218-03-53.

9.2. Диктанттың социаль селтәрҙәренә һылтанмалар: https://vk.com/bashdictant, https://www.instagram.com.